# Я, ты, он, она—вместе школьная страна

# «МЫ»

**Школьная газета**
**Печатный орган: обучающиеся МОБУ СОШ №1 с. Исянгулово**



**№15**
**ИЮЛЬ 2020**




**В этом выпуске:**
*1.Башҡорт теле көнө*
*2.Башҡорт телендә һөйләшәм*
*3. Иң һәләтле китап уҡыусы конкурсы*
*4. Төрләләр*

Башҡорт телендә һөйләшәм,
Яҙам башҡорт телендә.
Туған телде хөрмәтләйек
Башҡорт теле йылында!



14 декабрь-Башҡорт теле көнө тип билдәләнә.Был байрамға әҙерлек декабрь баштарында уҡ башлана.Асыҡ класс сәғәттәре ,викториналар,конкурстар,шиғри сылбыр(флешмоб) уткәрелә.Байрам Аҡмулланың тыуған көнөнә тура килеү сәбәпле,шағир ижады буйынса төрлө саралар уткәрелә.Быйыл Аҡмулла диктанты уткәрелде.Башҡорт теле көнө быйыл рәсми байрамға әйләнде,әлегә тиклем байрам символик рәүештә 2016 йылдан башлап Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы ҡарары менән уткәрелә ине.Быйылдан башлап байрам республика кимәлендә һәр йыл һайын оло сара булып үтәсәк.Иҫәнғол 1-се һанлы урта мәктәбендә лә байрамға арналған саралар үткәрелде.Район,республика кимәлендә үткәрелгән” Мин башҡортса уҡыйым” исемле акцияла ҡатнаштыҡ.Республика кимәлендә үткәрелгән күренекле совет дипломатыӘ.Хәкимовтың тыуыуына 130 йыл тулыу айҡанлы үткәрелгән Интернет-викторинала белемдәрҙе һынап ҡараныҡ.Башҡорт телен рекламалау маҡсатында “Мин башҡортса һөйләшәм” тигән шиғри сылбыр үткәрҙек.Был шиғри шәлкемдәр һәр баланың күңеленә ятты,улар тиҙ арала ятлап та алдылар.Сөнки улар таҡмаҡ талабына яраклаштырып эшләнде

Мин башҡортса һөйләшәм акцияһына...



<u>Ағиҙелдең буйҙарында</u>
<u>Матур Өфө ҡалаһы.</u>
<u>Башҡорт телендә һөйләшәм,</u>
<u>Мин бит башҡорт балаһы.</u>

Башҡорт теле йылы тиеп ,
Эй,ҡыуана әсәйем.
Мин дә башҡорт булыуыма
Ғорурланып йәшәйем.



Башҡорт телендә һөйләшәм,
Башҡорт телендә яҙам.
Әсә телен белмәгәндәр
Бөтөнләй бит ул назан!



Башҡорт телендә уҡыйым,
Яҙам башҡорт телендә.
Сөнки минең тыуған ерем
Башҡортостан ерендә.

Башҡорт телендә һөйләшәм,
Яҙам башҡорт телендә.
Ата-әсәйем дә башҡорт,
Башҡортмон мин үҙем дә.



Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең әҫәрҙәрен яратмаған кеше юктыр, моғайын.Сөнки уның әҫәрҙәре бик аңлайышлы, ябай , шуға күрә уларҙы ололар ҙа, балалар ҙа яратып уҡыйҙар.Миңә айырыуса М.Кәримдең Әлфиә хикәйәләре исемле китабы оҡшай.Был китаптағы хикәйәләр башҡорт теле дәреслегенә лә индерелгән.Яҙыусы был ижад емешен үҙенең яраткан ҡыҙына Әлфиәгә бағышлап,Әлфиә хикәйәләре,тип атаған.Ҡыҙының бала саҡтағы мәҙәктәрен күҙәтеп яҙып бара,аҙаҡ уларҙы китап итеп баҫтыра.Әлфиә хикәйәләре китабы бер нисә хикәйәнән тора.Сыйырсыҡ балаһы,Ҡыш бабай бәләкәй саҡта,Ҡайын урманында исемле бәләкәй генә хикәйәләрҙе үҙ эсенә ала.Хикәйәләр әкиәт алымы менән ҡыҙыҡлы яҙылған, шуға күрә уларҙы уҡыған һайын уҡығы килә.Мәсәлән,Ҡыш бабай бәләкәй саҡта тигән хикәйәлә Ҡыш бабайҙың бәләкәй сағы тураһындағы әкиәт сағылыш тапҡан.Ысынлап та,Ҡыш бабайҙы бөтә балалар һағынып көтөп ала,ә уның бәләкәй сағы тураһында улар беләләрме икән?Юҡтыр, моғайын.Ә М.Кәрим был турала шул тиклем матур әкиәт яҙып ҡалдырған.
Борон_борон заманда беҙ бөтәбеҙ ҙә ҡар бөртөктәре инек,тип башланып китә әкиәт.Аҙаҡ ҡар бөртөктәренең урамда балалар менән осрашыуы һүрәтләнә.Балалар образы ла бик үҙенсәлекле,хикмәтле алынған: Яҡшы малай,Уңған ҡыҙ,Яман малай,Илаҡ ҡыҙ. Уларҙың ҡар бөртөк тәрен йомарлап ҡыш бабай яһауы,аҙаҡ бергә уйнауҙары шундай йәнле, ябай итеп һүрәтләнә.Ҡыш бабайҙың яҙ еткәс,ҡар иленә китеүе, әммә йыл һайын яңынан килеп дуҫтарын эҙләүе бик мауыҡтырғыс итеп яҙылған.Әҫәр балаларҙа дуҫлыҡ, изгелек,кешелеклелек сифаттарын тәрбиәләй тип уйлайым мин.Сөнки хикәйәне уҡығандан һуң һәр малай Яҡшы малайға,һәр ҡыҙ Уңған ҡыҙға оҡшарға теләй, яҡшыраҡ,егәрләрәк булырға тырышалыр, моғайын.Мин һеҙгә лә был хикәйәләрҙе уҡырға тәкдим итәм.Шулай уҡ бөйөк шағирҙың балалар өсөн яҙылған Өс таған, Беҙҙең өйҙөң йәме повестарын да уҡырға саҡырам.

**МОБУ СОШ №1 с. Исянгулово**

453380, РБ, Зианчуринский район, с. Исянгулово, ул. Советская, д. 2

Телефон: (34785) 2-13-32
Эл. почта: 1@zianroo.ru

***Наш девиз***
***Я, ты, он, она—вместе школьная страна***

МОБУ СОШ №1 с. Исянгулово



2020 йылдың 2 ғинуарында күренекле шағир,башҡорт шиғриәтендә сағыу йондоҙ булып балҡыған Шәйехзада Бабичтың тыуыуына 125 йыл тулып үтте.Бөтә ғүмерен халҡына бағышлаған шағирҙың тормош юлына йәнә күҙ һалып үтәйек...Шәйехзада Бабич 1895 йылдың 2 ғинуарында Өфө губернаһының Бөрө өйәҙендә (хәҙерге Дүртөйлө районында) Әсән ауылында мулла ғаиләһендә тыуған, башланғыс белемде тыуған ауылында, атаһы, Әсән мәхәлләһенең указлы муллаһы, Мөхәмәтзакирҙың мәҙрәсәһендә ала.1910—1911 йылдарҙа Ҡаҙағстанда Кустанай яҡтарындағы Дүсәнбай ауылында ҡаҙаҡ балаларын уҡыта,ҡаҙаҡ телен өйрәнә,аҡындарҙың өләндәрен,әйтештәрен тыңлай ,ҡаҙаҡ халҡының бөйөк шағиры Абай Ҡонанбаевтың әҫәрҙәре менән таныша. Шәйехзада Бабич 1911—1916 йылдарҙа Өфө ҡалаһындағы «Ғәлиә» мәҙрәсәһендә уҡый. Заманының алдынғы ҡарашлы мәғрифәтселәре уҡытҡан мәҙрәсәлә ул әҙиптәр, артистар, буласаҡ журналистар, дәүләт эшмәкәрҙәре менән аралашып йәшәй. Мәҙрәсәлә ҡулъяҙма рәүешендә сығарылған «Парлаҡ» һәм «Электергес» исемле журналдарҙы сығарыуҙа әүҙем ҡатнаша. Башҡорт халҡының төрлө ҡыҫымдар арҡаһында ауыр тормош көтөүе башҡорт ерҙәре мәсьәләләре киҫкенләшеү, әсә телендә яҙма булдырыу, 14дөйөм белем биреүҙе камиллаштырыу тураһында борсолоп шиғырҙар үиҗад итә.Шулай уҡ ҡала күләмендәге кисәләрҙә лә йыш сығыш яһай,шиғырҙарын уҡый.
1916 йылда «Ғәлиә» мәҙрәсәһен тамамлағас, артабан бер йыл дауамында Ырымбур губернаһы Троицк ҡалаһында өсөнсө мәсет янындағы мәҙрәсәлә уҡытыу эше менән шөғөлләнә, «Аҡмулла» журналын сығарыуҙа ҡатнаша. Һуңынан Ырымбур ҡалаһында «Ҡармаҡ» сатирик журналында эшләй.1917 йылда Бөтә башҡорт ҡоролтайҙарына делегат була. 1917 йылдың 25—29 августында Өфөлә үҙған Икенсе Бөтә башҡорт ҡоролтайында Башҡорт мәркәз шураһы составына ағза итеп һайлана, шул уҡ йылдыШәйехзада«Тулҡын» бөтә башҡорт йәштәре союзының рәйесе итеп һайлана. Һуңыраҡ Шәйехзада Бабич «Нуктаһыҙ» сатирик журналын баҫтырыуҙы ойоштора.1919 йылдың 21 февралендә үҙған I Бөтә башҡорт хәрби съезының секретары була. 1919 йылдың 25 февралендә Башревкомдың матбуғат бүлеге хеҙмәткәре итеп тәғәйенләнә.1919 йылдың 28 мартында Башҡорт АССР-ы Бөрйән-Түңгәүер кантоны Йылайыр ауылында, типографияны күсереү эштәре менән шөғөлләнгәндә, шағир Ғәбделхәй Иркәбаев менән берлектә 1-се Смоленск уҡсылар полкының ҡыҙыл армеецтары тарафынан үлтерелә. Был фажиға Башҡорт армияһы Ҡыҙылдар яғына күскән осорҙа булған бутаусылыҡ һәм большевистик террор арҡаһында барлыҡҡа килә.Бабичтың үлемһеҙ ижады халыҡ күңелендә йәшәүен дауам итә.Шағирҙың исемен мәңгеләштереү маҡсатында1995 йылда шағирҙың тыуған яғында — Дүртөйлө районы Әсән ауылында Шәйехзада Бабич музейы асылған, Дүртөйлө районы Әсән ауылы урта мәктәбенә һәм Йылайыр районы Йылайыр ауылы башҡорт гимназияһына Шәйехзада Бабич исеме бирелгән.Әсәндә, Йылайырҙа, Сибайҙа һәм Мишкә районының Ҡыйғаҙытамаҡ ауылында шағирға бюст ҡуйылған.«Ғәлиә» мәҙрәсәһенә һәм Йылайырҙа шағир һәләк булған ерҙә урынлашҡан бинаға мемориаль таҡтаташ ҡуйылған.Баймаҡ, Бөрө, Дүртөйлө, Нефтекама ҡалаларында һәм

Бабичҡа эйәреп....

Ш.Бабичтың оҫта таҡмаҡсы булыуы билдәле. Шуға балалар ижад иткән таҡмаҡтарҙы ла ошондай исем менән урынлаштырҙыҡ.

Беҙҙең беренсе малай
Ғәзинур тип атала.
Серле генә йылмайып
Ултыра былай ғына.
Икенсе малайыбыҙ,

Марсель исемле була.
Ул беҙгә ҡарап ҡына
Ултыра йырлап ҡына.
Өсөнсө малай шаян

Йүгерә лә һикерә,
Тәнәфестән –тәнәфесте
Көтөп кенә ултыра.
Башланды уҡыу йылы

Беренсе дәрес бара.
Сергей тәҙрәгә ҡарай:
Каникул ибыҙ ҡайҙа?

Эйек йылғаһы.
Иҫәнғолдан алыҫ түгел
Аға киң йылға Эйек.
Ярҙарынан һикереп төшөп
Уйнаным әле элек.
Эйек йылғаһы тәрән
Һыу аҫты тулы балыҡ.
Һыу инеүе бик күңелле
Сәсрәтеп уйнап алдыҡ.

10 синыф уҡыусыһы Назгөл.

## ДЕКАБРЬ АЙЫНА ҺЫНАМЫШТАР

1 декабрь – әгәр ҡыштың беренсе көнөндә ҡара ҡарға күрһәгеҙ, ҡыш йылы булыр.
2 декабрь – аяҙ һауа ҡыштың һалҡын килеүе тураһында һөйләй. Әгәр был көндө ҡар төшһә, ғинуарға тиклем сатнама һыуыҡтар көтмәгеҙ.
3 декабрь көндө ҡар яуһа, 3 июндә көслө ямғыр яуа. Әгәр кирећенсә булһа, йәй иртә килер.
4 декабрь – күктә болоттар күп булһа, бер аҙҙан һыуытасаҡ. Буран йылы һәм ҡарһыҙ ҡыш башланыуы тураһында һөйләй.
5 декабрь көндө бик ныҡ һалҡын булһа, тимәк, оҙаҡламай бурандар башланыр.
6 декабрь көндө ҡар төшһә, һыуыҡтар булыр. Әгәр был көндө епшек икән, Яңы йылға тиклем ҡыш көтмәгеҙ.
7 декабрь күктә йондоҙҙар балҡып торһа, һауа торошо кинәт үҙгәрер. Әгәр был көндө йондоҙҙар атылһа, ҡышын ҡар аҙ яуа, ә мартта көслө һыуыҡтар килер.
8 декабрь көндө мөрйәнән сыҡҡан төтөнгә иғтибар итәләр. Әгәр ул өҫкә күтәрелһә, тиҙҙән ҡар яуыр. Таралып китһә, елле булыр.
9 декабрь – әгәр был көндө болоттар ергә һалынып торһа, бер аҙҙан һыуыҡтар етер.
10 декабрь көндө эт һәм бесәйҙәр үҙҙәрен ғәҙәттәгенән тынысыраҡ тотһа, ҡаты һыуыҡ һәм ыжғыр буран көтөгөҙ.
11 декабрь көндө бесәй тырнанһа, һыуыта. Эт өрөп, шыңшый икән, бик көслө һыуыҡтар киләсәк.
12 декабрь көндө әҙерәк болотлап торһа, һыуыта. Көн томанлы икән, тиҙҙән көслө ел һәм буран булыр.
13 декабрь көндө ҡар яуһа, ул ерҙә 110 көн ятыр.
14 декабрь – ҡаурый-ҡаурый ҡатламлы болоттар һыуыҡтар тураһында киҫәтә.
15 декабрь көндө ямғыр яуһа, ул 40 көн буйына дауам итә.
16 декабрь көндө балыҡсылар яҡшы табыш менән ҡайтһа, ҡыш йылы килер.
17 декабрь көндө ағас ботаҡтарында ҡар ята икән, ҡыш һалҡын килер.
18 декабргә тиклем бер тапҡыр ҙа һыуыҡтар булмаған икән, тимәк, тиҙ арала епшек ҡар бураны булыр.
19 декабрь – бесәйҙәр ауыҙ-моронон тәпәйе менән ҡаплап йоҡлаһа, тиҙ арала көслө һыуыҡтар килер.
20 декабрь – бесәйҙәр һыу эсһә, көслө яуым-төшөм булыр.
21 декабрь ҡояш ғәҙәттәгенән иртәрәк сыҡһа, ҡар яуа.
22 декабрҙә көн аяҙ булып, ҡар яуһа – йылы ҡышҡа ишара.
23 декабрҙәге буран – көслө һыуыҡтар билдәһе.
24 декабрь – ҡоштар түбән осһа, ел көсәйер. Көньяҡтан иҫкән ел көндөң йылыныуы тураһында һөйләй.
25 декабрь – киләһе йылдың уңышлы килеү-килмәүен белеү өсөн был көндө сейә ботағы киҫеп, уны ер һалынған сүлмәккә ултыртҡандар. Ул Раштыуаға япраҡ ярһа, йыл уңышлы килә тип һаналған.
26 декабрҙән башлап 12 көн һыуыҡ була икән, ҡыш сатнама һалҡын килер.
27 декабрь – төндә ағастарҙы бәҫ һарыһа, ҡыш һыуыҡ килә. Иртәнге сатнама һыуыҡ тиҙ арала көслө ел һәм ҡар бураны буласағын иҫкәртә.
28 декабрь көндө йылы була икән, тимәк, көслө һыуыҡтар ҡыш аҙағында ғына киләсәк.
29 декабрҙәге һалҡын әсе ел Раштыуа һалҡындарының дауамлы булыуы хаҡында иҫкәртә. Болотло, елле көн – кинәт йылытыуға.
30 декабрҙә ҡар яуһа, Яңы йыл төнө һалҡын булыр.
31 декабрь көндө иларға һәм күңелһеҙләнергә ярамай, юғиһә йыл буйы шунд-